*Приложение №2*
*к рабочей программе по изобразительному искусству, утв. пр. № 116 от 29.08.2022 г.*

Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
средняя общеобразовательная школа
имени Талгата Лутфулловича Рахманова с.Верхнеяркеево
муниципального района Илишевский район Республики Башкортостан

УТВЕРЖДАЮ
Директор МБОУ СОШ
им.Т.Рахманова с.Верхнеяркееево
_______________ Шафикова Г.И.
№ пр.116 от «29» августа 2022 г.

# Контрольно-измерительные материалы промежуточной аттестации и критерии оценивания

Родная литература (башкирская)
название курса

| | |
|---|---|
| Уровень общего образования (начальное, основное, среднее) | основное |
| Класс | 7,9 |
| Учитель: | Фахруллина Г.А. |

2022 г

Тестар

**7 класс**

1. **Халыҡ һүҙе**

1. Ниндәй әҫәрҙә Аҡһаҡалдар ҡала төҙөү тураһында кәңәш ҡоро үткәрәләр?
1.Теләс
2. Торатау.
3. Өфө.
4.Арҡайым.

2. Сеңләү жанрын кемдәр башҡарған?
1.Ата- әсәләр.
2.Егеттәр.
3.Ҡыҙҙар.

3. Тарихи ваҡиғалар, хәрби поход тураһындағы йырҙарға ниндәй йырҙар инә?
1."Урал", "Эскодрон"
2."Уйыл","Ҡолой кантон"
3."Зөлхизә","Ғилмияза"

4.Ерәнсә сәсән образы ниндәй әкиәттә бирелә?
1."Йәнтүрә"
2. "Айыу менән бүре"
3."Ерәнсә сәсән"

Эштәр:
1.Һеҙгә башҡорт халыҡ ижады оҡшаймы?
2.Һеҙ тағы ниндәй жанрҙарҙы беләһегеҙ?
(функциональ грамоталылыҡты үҫтереү - развитие функциональной грамоты)

**2. Яҙыусылар һәм шағирҙар ижады**

3. Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры кем?
1.М. Кәрим.
2. С.Ҡудаш.
3.М. Ғафури.
4. Р. Ниғмәти.

4. 1919 йылда Ш. Бабич фажиғәле рәүештә ҡайҙа һәләк була?
1. Баймаҡта.
2. Теләстә.
3. Йылайырҙа.
4. Өфөлә.

5.Д.Юлтый тәүге белемде ҡайҙа ала?
1.Үҙ ауылында.
2. Ырымбурҙа.
3. Сорокин мәҙрәсәһендә.

6.1924 йылда Д.Юлтый балалар өсөн ҡайһы әҫәрен яҙған?
1.”Сана шыуғанда”.
2. “Ҡарағол”.
3.”Тимеркәй фәлсәфәһе”

7.Сәми ҡарт ниндәй эш башҡарған?
1.Ауылда эшләгән.
2. Урман ҡарауыллаған.
3. Батрак булған.

8. Сәми ҡарт ҡайҙан ауырыу йоҡтороп ҡайта һәм үлеп ҡала?
1.Баҙарҙан.
2. Урмандан.
3. Ауылдан.

9. Тимеркәйҙең яҙмышы нисек тамамлана?
1.Ауылына ҡайта.
2. Һуғышта үлеп ҡала.

Эштәр:
1. Һеҙгә ниндәй әҫәр оҡшаны? Ни өсөн?
2. Ҡайһы яҙыусының ижадына айырыуса ҡыҙыҡһыныу уянды?
(функциональ грамоталылыҡты үҫтереү - развитие функциональной грамоты)

**3. Һ.Дәүләтшина ижады**

1.Һ. Дәүләтшина тәүге белемде ҡайҙа ала?
1.Һамарҙа.
2. Күрше ауылда.
3. Үҙ ауылындағы ҡыҙҙар мәҙрәсәһендә.

2. “Айбикә” повесы ҡасан баҫыла?
1.1926.
2. 1931.
3. 1934.

3. Айбикә тәүге белемде ҡайҙа ала?
1.Абыстайҙа.
2. Ғәйшәлә.

4. Колхозға ингәс, Айбикә ниндәй һөнәр ала?
1.Һауынсы.
2. Уҡытыусы.
3. Тракторсы.

Эштәр:
1. "Айбикә" әҫәре һеҙҙә ниндәй тәьҫораттар ҡалдырҙы?
2. Айбикәнең үҫеш эволюцияһы тураһында ни әйтергә мөмкин?
(функциональ грамоталылыҡты үҫтереү - развитие функциональной грамоты)

**4. М.Кәрим ижады**

1. М. Кәрим тәүге белемде ҡайҙа ала?
1.Үҙ ауылында.
2. Өфөлә.

2.М. Кәрим ҡайһы районда тыуған?
1.Дәүләкән.
2. Илеш.

3. Шишмә

3. Айгөл кемде эҙләп кешелек донъяһына мөрәжәғәт итә?
1. Атаһын.
2.Әсәһен.
3.Йәғәфәр бабаһын.

4. Кешелек донъяһына мөрәжәғәт итеүҙә Айгөлгә кем ярҙам итә?
1.Ябағаев.
2. Моратшин.
3. Ричард Галин.

5. Әсәһе килгәс, Айгөл ике ут араһында ҡала. Ул ҡайһы юлды һайлай?
1.Әсәһен.
2. Тыуған илен. Тыуған ерен.

Эштәр:
1. М.Кәримдең тағы ниндәй әҫәрҙәре менән танышһығыҙ?
2. Айгөл образы һеҙгә оҡшанымы? Һеҙ Айгөл урынында булһағыҙ, ниндәй юл һайлар инегеҙ?
(функциональ грамоталылыҡты үҫтереү - развитие функциональной грамоты)

9 класс

**1. Халыҡ ижады**

1.Йыр,таҡмаҡ, бәйет, һамаҡ кеүек халыҡ ижады әҫәрҙәре ниндәй төргә ҡарай?
1) Йола поэзияһы.
2) Халыҡ ижадының сәсмә төрҙәре.
3) Афористик жанрҙар.
4) Героик эпос.

2.Быуындан- быуынға , телдән - телгә күскән, йылдар үтеү менән авторы онотолған һүҙ сәнғәте нисек атала?
1) Халыҡ ижады.
2)Яҙма әҙәбиәт.

3. "Урал батыр" халыҡ ижады әҫәре ниндәй төргә ҡарай?
1) Йола поэзияһы.
2) Халыҡ ижадының сәсмә төрҙәре.
3) Афористик жанрҙар.
4) Героик эпос.

4. "Салауат менән Юлай" әҫәре ниндәй төр ҡобайырға ҡарай?
1) Тыуған ил тураһында.
2) Батырҙар тураһында.
3) Тормош- көнкүреш тураһында.

5.Халыҡ "Урал батыр" эпосында кемде яҡын күрә һәм үҙ батыры итеп һанай?
1) Уралды
2) Шүлгәнде
3) Әзрәкәне

6. Һабрау йырау ҡайһы ҡобайыр геройы?
1)" Урал батыр"

2) " Аҡбуҙат"
3) "Иҙеүкәй менән Мораҙым"

7.Ырыу тарихы һәм быуындар сылбыры тураһындағы ҡулъяҙма нисек атала?
1) Иртәк
2) Ҡобайыр
3) Шәжәрә
4)Хикәйәт

Эштәр:
1. Башҡорт халыҡ ижады тураһында нимәләр белдегеҙ?
2. Хәҙерге батырҙар ниндәй?
(функциональ грамоталылыҡты үҫтереү - развитие функциональной грамоты)

**2. Салауат та батыр ир икән**

1.Палдиски ҡалаһына мәңгелек һөргөнгә ебәрелгән шағир, сәсән, ихтилал етәксеһе кем?
1) Батырша
2) Кинйә
3) Салауат
4) Алдар

2. Салауат Юлаевтың "Тыуған илем", "Уралым" шиғырҙары ниндәй темаға ижад ителгән?
1)Мөхәббәт темаһына
2) Тыуған ил, Ватан темаһына
3) Ил азатлығы өсөн көрәш темаһына

3."Зөләйха", "Тирмәмдә", "Һандуғас" шиғырҙарын С.Юлаев ниндәй темаға арнаған?
1) Мөхәббәт темаһына
2) Тыуған ил, Ватан темаһына
3) Ил азатлығы өсөн көрәш темаһына

4.Өфөләге Салауат Юлаев һәйкәленеү авторы кем?
1) Т.Нечаева
2) С.Тавасиев
3) Ә.Лотфуллин
4) Р.Ишбулатов

5."Салауат Юлаев" операһының авторы кем?
1) Х.Әхмәтов
2) З.Исмәғилев
3) Р.Мортазин
4) Р.Сәлмәнов

6.Салауат Юлаев образын кинола кем уйнаған?
1) Ә.Әбүшахманов
2) А.Мөбәрәков
3) Ф.Ғафаров
4) О.Ханов

Эштәр:
1. САлауат Юлаев премияһы лауреттарын әйтегеҙ.
2. С.Юлаевтың исемен мәңгеләштереү мәсьәләһе нисек тора?
(функциональ грамоталылыҡты үҫтереү - развитие функциональной грамоты)

**3. М.Акмулла -яҡтылыҡ йырсыһы**

1. Аҡмулла ҡайһы йылдарҙа йәшәгән?
1) 1841-1907
2) 1831-1895
3) 1880-1934
2.Аҡмулла тәүге белемде ҡайҙа ала?
1) Үҙ ауылында
2) Мәнәүезтамаҡ ауылында
3) Әнәс мәҙрәсәһендә
4) "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендә

3. Аҡмулла ҡайҙа 4 йыл төрмәлә ултырып сыға?
1) Ырымбурҙа
2) Өфөлә
3) Ҡазанда
4) Троицкиҙа

4. Аҡмулла ҡайһы шиғырында халыҡты мәғрифәткә саҡыра?
1) "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!"
2) "Урыным- зиндан..."
3) "Һауаланма"

5.
1) Ай булмаһа,йондоҙ менән төн яҡтырмай,
Иң яҡшы йондоҙға ла мохтаж түгел ай.
Был өҙөк Аҡмулланың ҡайһы шиғырынан алынған?

1) "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!"
2) "Урыным- зиндан..."
3) "Һауаланма"
4) "Шиһабетдин Мәржәни мәрҫиәһе"

1. Аҡмулла- яҡтылыҡ йырсыһы. Был юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?
2. "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк" тип яҙыуы бөгөн дә актуальмы?
(функциональ грамоталылыҡты үҫтереү - развитие функциональной грамоты)

**Тестарҙы баһалау**

"5 "-85-100% дөрөҫ яуап булғанда
"4" -70% һәм унан күберәк һорауҙарға дөрөҫ яуап биргәндә
"3" -50% һәм унан күберәк һорауҙарға яуап биргәндә
"2" -50% -тан кәмерәк һорауҙарға яуап биргәндә

**Һаулыҡ буйынса мөмкинлектәре сикләнгән уҡыусылар өсөн баһалау формалары.**

***Уҡыу һәләтлектәрен баһалау:***
40-50 һүҙ 120-150 билдә 50-65 һүҙ-эстән уҡыу.
Яҙма эштәр: бирелгән текстарҙы күсереп яҙыу-40-50 һүҙ.
һүҙлек диктанты:15-20 һүҙ,

**Телдән яуаптарҙы баһалау:**

**“5” билдәһе ҡуйыла:**

-әгәр материалды аңлап, тулы яуап ҡайтарһа;

- белемен практик ҡуллана алһа ,аңлата белһә;

**“4” билдәһе ҡуйыла:** яуабында 1-2 хата яһап,үҙе төҙәтһә;

**“3” билдәһе ҡуйыла:** материалды аңлауын күрһәтһә, әммә

- тулы асып бирә алмаһа, төшөнсәләрҙә хаталар ебәрһә;
- үҙ фекерен миҫалдар менән нигеҙләй алмаһа;